МАУК “Мелеузовская ЦБС
Арслановская библиотека

# Деревня Смаково на страницах периодический изданий



## Дайджест

Смаково 2018




**Автор-составитель:**
**Библиотекарь Байгильдина Залия Ахтямовна**

**Деревня Смаково на страницах периодических изданий [Текст] : дайджест : 12+ / на баш. яз. ; авт.-сост. З. А. Байгильдина. - Смаково: Арслановская б-ка, 2018. - 36 с.**

Хөрмәтле уҡыусым!

Беҙҙең Смаҡ ауылы бик матур ерҙә урынлашҡан. Мәләүез ҡалаһы менән ауыл араһы 12 км. Тирә-яҡты урман-тауҙар уратып алған. Ауыл йылдан йыл үҫә. Бөйөк яҙыусыбыҙ Динис Бүләков исемен йөрөткән мәктәп һәм музей бар.

Был дайджестта һеҙ ауыл тарихы һәм ауылда йәшәүсе арҙаҡлы кешеләр тураһында яҙылған. Киләсәктә һеҙҙә был дайджестка үҙ өлөшөгөҙҙө керетерһегеҙ тип уйлайым. Һәр ғаиләнең үҙ тарихы бар бит.

Был дайджестка 2000 йылдан 2018 йылғы гәзит биттәрендә сыҡкан мәғлүмәттәр алынды.

Дайджест менән тыуған яҡты өйрәнеүселәр, тарих уҡытыусылары, сит тарафтарҙа йәшәгән ауылдаштар ҡулана ала.

Минең уйлауымса был дайджест һеҙгә оҡшар тип уйлайым.

Ауыл! Һиндә генә тоям мин ер еҫен,
Тыуған ерем һаман һаҡлай тартыу көсөн.

Тыуған ергә береккәндер тамырым,
Шул тамырҙан йәшәү көсө алырмын.

Йорт алдында йәшел-хәтфә келәмдәр,
Күпереп үҫә бында бәбкә үләндәр.

Ғәмһеҙ бала-сағыма кайтайым әле,
Бәбкә үләндәрен косоп ятайым әле.

Ҡойоларҙа һыуларың саф, йәнгә дауа,
Күкрәк тултырып һуларға таҙа һауа.

Тыуған телде һаҡлаған ата-бабам,
Быуындан-быуынға тел-мираҫ ҡалған.

Күпме йәдкәр-ҡомарткылар һаҡлайһың һин,
Төрлө ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлайһың.

Туйҙыраһың бар ғәләмде икмәк менән,
Ауыл-донъя кендеге һин, шуны беләм.

Ф.Йомағолова

1. **Смаҡов, Илдус. Смаҡ ауылы һәм минең фамилиям – бер тамырҙан [Текст] : 12+
// Көнгәк. - 2000. - 28 декабрь. - Б. 8.**

Смаҡ ауылы Мәләүездән ун ике километр алыҫлыҡта матур Нөгөш йылғаһы буйында урынлашҡан. Ул минең тыуған ауылым, сөнки унда әсәйем менән атайым тыуған, күп туғандарыбыҙ йәшәй. Мин элек тә был күркәм ауыл хаҡында күпте белә инем, ә яңыраҡ уның тарихын һәм хәҙергеһен ентекләп өйрәнергә булдым. Ауылдың аҡһаҡалдары менән һөйләштем, Ә.З.Әсфәндиәровтың “Башҡортостан ауылдарының тарихы” китабында күп мәғлүмәттәр таптым.

Ауыл XVIII быуаттың 40-сы йылдарында барлыҡҡа килгән. Ул 1763 йылда Ырымбур губернаторы башҡорт игенселеген киңәйтеү шарттары тураһында хат яҙған Смаҡ Ҡасаев хөрмәтенә исемләнгән. Смаҡтың тамғаһы ла билдәле. Ауылдың Тамъян тигән икенсе исеме лә бар. Беҙҙә Миңлекамал Бикбаева нан яҙып алынған легенда йәшәй. Ауыл төҙөлгәнгә тиклем был ерҙәр урмандарға, көтөүлектәргә, шишимәләргә бай булған икән. Яҡында киң Нөгөш йылғаһы аҡҡан. Башҡорттар күсмә тормошта йәшәгән. Бер ваҡыт ауыл урынына бер төркөм күскенселәр туҡталған. Иң оло һәм мөхтәрәм Тамъян аҡһаҡалдың һиғеҙ улы:Бикбай, Смаҡ, Үҙәнбай, Туҡһанбай һ.б. булған. Һуңынан Смаҡ ауылында шуларҙың исемдәренән фамилиялар килеп сыҡҡан. Минең фамилиям – шуларҙың береһе. Әүәл ауыл Алама Тамъян тип йөрөтөлгән, был ярлы, ауыр тормошто аңлатҡан. Һуңғараҡ уға халыҡтың тормошон яҡшыртҡан кешенең – фарыз буйынса Тамъяндың улы Смаҡтың исемен биргәндәр. 1917 йылдағы революцияға тиклем ауылда. 67 йорт иҫәпләнгән, 257 кеше йәшәгән. Бөйөк һуғышы алдынан Смаҡта 17 йорт булған. 124 кеше йәшәгән. 90-сы йылдарҙа халыҡ һаны 470-кә еткән.

Ырыуыбыҙ, ата-бабаларыбыҙ тураһында мин өләсәйем Нурия Мөхтәр ҡыҙы Смаҡованан белдем: “Революцияға тиклем ауыл халкында бер нисә йөҙ дисәтинә ер иҫәпләнде, һәр кем тиерлек ат аҫыраны. Ерҙе һуҡа менән һөрҙөләр. Ҡайһы бер кешеләрҙең генә ере бар ине. Ере юҡ крәҫтиәндәр байҙарға ялланып эшләне. Минең атайым Мөхтәр Смаҡов урта хәлле булды. Бер ат, һыйыр, кәзә-һарыҡ аҫыраны. Уның ере бар ине. 1929 йылда ул колхозға беренселәрҙән инде һәм уны ойоштороуҙа ҡатнашты. Ниндәй генә вазифа биләмәһен, ал-ял белмәне. Бригадир, склад, ферма мөдире булды. Миҙалдар,Почет граматолары менән бүләкләнеләр үҙен. Уға “Почетлы колхозсы” исеме бирелде. Атайымдың фотографияһы Мәләүез ҡалаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейында элеүле”.

Хәҙер Смаҡ ауылында иркен һәм матур йорттар күп. Халыҡ “Нөгөш” йәмғиятендә эшләй, иген, йәшелсә үҫтерә. Яҡташыбыҙ Муса Смаҡов – республиканың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре. Бик күптәр намыҫлы эшләй. Быйыл беҙҙең колхоз дәүләткә иген һатыу йөкләмәһен тәүгеләрҙән үтәне.

2. **Абдрахманова, Лена. Килмешәккә төшһә көнөң, йәм ҡалмаҫ тыуған ерҙә [Текст] : 12+**
   **// Көнгәк. - 2010. - 8 июль. - Б. 3.**

**Ауыл тарихынан**

Смаҡ ауылы XVIII быуаттың 40-сы йылдарында барлыҡҡа килгән. Уға ниғеҙҙе Тамъян олоҫо аҫабаһы Смаҡ Ҡасаев һалған тигән фараз бар. Уның исеме Нуғай юлы аҫабаларының Яйыҡ, Һаҡмар, Ағиҙел, Туғыҙтимер, Ҡарғалы, Һуйылмыш,Юшатыр, Ыҡ буйҙарындағы мәғдән сыҡҡан ерҙәрҙе заводсылар Твердышев һәм Мясниковҡа һатыу тураһында 1754 йылғы килешеүгә ҡул ҡуйыусылар араһында осрай. 1756 йылда Тамъян олоҫо Воскресен заводында уның тирәһендәге Тор йылғаһынан Ағиҙел һәм Нөгөшкә, йәғни Ҡыпсаҡ һәм Юрматы олоҫтары сигенә тиклем араны 55 һумға һатҡан. Килешеүгә олоҫтоң ышаныслы кешеһе, тип, һайланған Смаҡ Ҡасаев ҡултамға ҡуйған. Нуғай юлының башҡа аҫабалары менән бергә игенселекте киңерәк йәйелдереү шарттары тураһында Ырымбур губернаторына яҙған хатта ла уның тамғаһы бар. Смаҡтың улы Әзебай (1773-1839 йй.) зауряд – йөҙ башы булып хеҙмәт иткән. Уның Әйүп, Әбделмәннән, Әбделвахит исемле улдары булған. 1795 йылғы V ревизияла Смаҡ 29 йортло ауыл булған, 208 кеше йәшәгән VIII ревизияла халҡы 56-ға кәмегән. 1816 йылда башҡа тамъян ырыуы ауылдары араһында булмаһа ла, 1834 йылғы халыҡ иҫәбен алыу 122 кеше йәшәгән 18 йортло Исламғол ауылын теркәгән. Исламғолдо Смаҡтан айырылып сығыусылар нигеҙ һалған.тиергә ныҡлы нигеҙ бар. Смаҡ ауылын шул тирә урыҫтар Бириково тип йөрөтә. Ә тирә-яҡ башҡорттарында Тамъян исеме менән билдәле. Смаҡ Ҡасаевтың нигеҙ һалыныуы тураһында фекер йәшәһә лә, дөрөҫлөккә оҡшаған башҡа варианттар ҙа бар. Иҙел-Нөгөш тамъяндары шәжәрәһендә Исмаҡ (Смаҡ) һәм Касай исемдәре осрай. Касайҙың бер улы булған – Аҡманай. Шәжәрәлә күрһәтелгән Исмаҡ (Смаҡ) – Муса Һөйәровтың улы. Ул да ауылға нигеҙ һалыусы булырға мөмкин. Исмаҡтың (Смаҡ) өс улының береһе Исламғол булған.



***П.Рычковтың 1755 йылғы картаһынан күренеш***

Бирек атамаһына килгәндә, ул ауыл П.рычковтың 1755 йылғы картаһында билдәләнгән. Нигеҙ һалыусының исеме Бирек булған тигән фараз да бар. Уның өс улы- Айыт, Сәйет, Юлдаш билдәле. Улар 1756 йылдың 25 июлендә башҡалар менән бергә заводсы Иван Твердышевҡа купчий ҡағыҙын биргән.

1859 йылда Смаҡ ауылында 33 йортта 213 кеше йәшәгән. 1920 йылға йорт һаны 69-ға, кеше һаны 257-гә еткән. 1842 йылда 152 кешегә 200 бот ужым, 464 бот ярауай игене сәскәндәр. Бөтәһе 238 баш йылҡы малы, 448 баш һыйыр малы, 461 баш һарыҡ, 25 баш кәзә һәм 25 баш умарта иҫәпләнгән.




**Смаҡ бөгөн**

Смаҡ-Ужа йылғаһы Нөгөшкә ҡойған ерҙә урынлашҡан, районның иң матур ауылдарының береһе. Унда бөгөн 149 йортта 549 кеше йәшәй. Дөйөм халыҡ һаны 90-ы- пенсионер. 18 йәшкә тиклемге балалар һаны – 117. Был һанда, әлбиттә, ауылда теркәлеп, ситтә йәшәүселәр ҙә бар. Балалар баҡсаһында 25 бала тәрбиәләнә. Динис Бүләков исемендәге дөйөм урта мәктәптә үткән уҡыу йылында 79 бала уҡыған. Шуның икәүһе сығарылыш имтихандарын тапшырып, ҡулына өлгөргәнлек аттестаты алған. Туғыҙынсы класты 11 уҡыусы тамамлаған. Яңы уҡыу йылында 1 класҡа ике уҡыусы киләсәк. Педагогия коллективында 20 уҡытыусы. Улар араһында юғары категориялылар ҙа, мәғәриф отличниктары ла бар.

Бөйөк Ватан һуғышы ветеранының тол ҡатыны – 1915 йылғы Мәхмүзә Калимуллина һәм 1917 йылғы Ғәйникамал Шаһманова – ауылдың иң оло кешеләре.



*Ауылдың иң оло кешеһе – Ғәйникамал Шаһманова*

“Тыуғандан алып, тыуған еремдән айырылманым, шөкөр. Смаҡта тыуҙым, үҫтем, кейәүгә лә ошонда сыҡтым, әсәйемдең берҙән-бер ҡыҙы булһам да, уның ҡуйынында оҙаҡ иркәләнергә тура килмәне.

Өйҙә ҡул араһына инеп эшләй башлауыма дөйөм хужалыҡ
эшенә саҡырҙылар. Шулай итеп, үҙемде белә белгәндән алып эшләнем. Иң ҙур байлығым – эшләгән йылдарым һәм миҙалдарым”, - Ғәйникамал инәй, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең юбилей айҡанлы бирелгән миҙалдарын һаҡлыҡ менән һыйпап.

Утауҙа ла, кәбән һалыуҙа ла, ҡул менән иген сәсеүҙә, урыуҙа, йыйыуҙа – бөтәһендә лә ҡатнаша. “Смаҡтар элек – электән эшкә уңған, бер-береһенә ярҙамсыл булды. Бөтә эште уртаға һалып эшләй инек. Хәҙер генә сит ауылдарҙан килеп ауыл ҙурайҙы, халҡы үҙгәрҙе”, - ти инәй. Ғәйникамал Шаһманова ауыл мәсетенең манараһын ҡолатҡан вакытты яҡшы хәтерләй. “Мәсеттең аҙан әйтә торған бейек ҡоролмаһын ҡолатып төшөрөргә Арыҫлан кешеһен саҡырҙалар. Төшөрөүен төшөрҙө, әммә манараның айын тапманылар – һыуға төшкән кеүек юҡ булды ла ҡуйҙы. Һуңынан мәсет бинаһын мәктәп иттеләр. Әсәйем унда ҡарауылсы булып эшләне”-ти ул.

Үҙ заманының ауыр һынауын лайыҡлы үткәрә инәй: уның тормош иптәше Бөйөк Ватан һуғышында тәүге йылында хәбәрһеҙ юғала. Күңел һағышын, хеҙмәт ауырлығын ҡыҙы Мәбүрә менән баҫа, йыуаныс таба. Һуғыштан һуң икенсегә сыға, унан Зәйнәп исемле ҡыҙы тыуа. Бөгөн ошо ҡыҙҙарынын, ейән-ейәнсәрҙәренен ҡәҙер-хөрмәтендә йәшәй.

Ауылдын ин йәш кешеһе – Илнур. Ағымдағы йылдын 25 майында тыуған малай – Нурсилә һәм Илгиз Иманғоловтын тәүге балаһы. Йәш ғаилә әлегә ата-әсәһе менән йәшәй, үҙҙәренә һалырға йорт урыны алғандар.

Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарынан берәү генә иҫән – Сәйетгәрәй Шаһманов.

Күп балалы ғаиләләр өсәү – Фирүзә һәм Рәфис Сафиндар, Рәсимә һәм Ришат Шаһмановтар, Гөлйемеш һәм Тимерғәли Аҫылбаевтар. Уларҙын һәр береһендә бишәр бала. Роза һәм Ринат Бикбулатовтарҙын күркәм

ғаиләһендә дүрт бала үҫә. Өс балалы ғаиләләр иһә бөгөн ауылда күбәйгәндән – күбәйә.



***Ауылдың иң йәш кешеһе – Нурсилә һәм Илгиз Иманғоловтарҙың улы Илнур***




***Роза һәм Ринат Бикбулатовтарҙың татыу ғаиләһе***

## Иртәгәһе көн менән йәшәйҙәр

Ауыл халҡының күбеһе шәхси хужалығынан килем алып йәшәйҙәр. Малсылыҡ менән бергә үҫемлекселек менән шөғөлләнеүселәр ҙә бар. Бөгөн унда 216 баш һыйыр малы иҫәпләнә, шунын 132-һе-һауын һыйыр. Йылҡы-24 баш, һарыҡ-283 баш, кәзә-4 баш, умарта-42 баш теркәлгән.(2010 йылдын 1 ғинуарына биреләгән мәғлүмәт буйынса). Был һан әлбиттә,һәр ваҡыт әйләнештә - кемдер һата, кемдер ала. Ҡыш көнө, мәҫәлән, тауыҡ һаны 500-ҙән ашыу булһа, яҙлы-көҙлө ҡош-ҡорт икеләтә-өсләтә арта. Йылдан-йылшәхси хужалыҡта мал аҫраусылар кү-бәйә. Мал-“тере валюта”. Унын менән йорт төҙҙөйҙәр, бала уҡыталар, машина алалар, ҡыҙ бирәләр, улдарын өйләндерәләр. Быйылғы ҡоролоҡ ҡына бәкәлгә һуҡмаһа, артабан да малын ишәйтергә теләүселәр күп. Атай-олатайҙар шөғөлө-йылҡысылыҡ, уматрасылыҡты үҫтереүселәр ҙә бар. Мәҫәлән, ағалы-ҡустылы Фәрүәз һәм Фәнис Шаһмановтарҙын береһе күпләп умарта тота, икенсеһе йылҡы үрсетә. Бала саҡтан ат йәнле Фәнис быйыл Ишембай районында үткән Салауат йыйынында бәйгелә бишенсе урын алып ҡайтты, район һабантуйында ла ҡатнашмай ҡалғаны юҡ.

Бәләкәй ауылдарға ҡарағанда ҙур тораҡ пункттарҙа халыҡ мәшғүллеге ярайһы хәл ителгән. Мәктәп, балалар баҡсаһы, фельдшер-акушерлыҡ пункты, Динис Бүләков исемендәге музей, мәҙәниәт йорто, почта элемтәһе, магазин ни тиһән дә, бер ни тиклем эш урыны булдырылған. Фәнни-етештереү берекмәһенен “Мәләүез” филиалында, ҡалаға йөрөп эшләүселәр ҙә бар. Бер һүҙ менән әйткәндә, Смаҡта шөғөлһөҙ йөрөгән кеше күрмәҫһен. Шуныһы ҡыуаныслы. Йәй көнө ҡатын-ҡыҙға тағы бер эш өҫтәлә - иш янына ҡуш булһын тип, ҡала яҡын булғас, һөт-ҡаймағын, майын-эремсеген һатырға йөрөй.

Йәштәр ҙә оҙаҡ йөрөмәй – ваҡытында башлы-күҙле булып, матур итеп донъя көтә башлай. Йәш ғаиләләрҙен ауылда күпләпҡалыуы һөйөнөслө. Уларҙын күбеһе башҡа сығып, яны йорт һалып инә. Бөгөн ауылда унлап йортҡа нигеҙ һалынған. Былтыр ошо хәтлеме өй тулған. Әле тағы 157 участкаға документ әҙерләнә.

## Һоҡланырлыҡ та шул

Ауыл шулай көндән-көн ҙурая. Смаҡ аша йөрөгән воскресендар, ысын мәғәнәһендә, һоҡлана уларға. “Ямғырҙан һуң ҡалҡҡан бәшмәк кеүек йорттар һаны арта”, - ти икән улар.

Бөгөн унда дөйөм халыҡ һанынын 493-ө - башҡорт, 33-ө - татар, 8-е – урыҫ. Йәнә 3 әрмән, 4 ҡаҙаҡ, 1-әр тажиҡ һәм сыуаш,5 дарғын халҡы теркәлгән.

Смаҡ халҡы – башҡорт халҡынын милли, йола байрамдарына ҙур иғтибар биреүе, дини йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе хөрмәт итеүе, улай ғына ла түгел таратыуы, йәш быуында тарихи үткәнебеҙгә ғорурлыҡ тойғоһо уятыуы йәһәтенән башҡа төбәктәргә өлгө. Бында, һис шикһеҙ, “Нөгөш ынйылары” фольклор коллективы етәксеһе, Башҡортостандын атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Гөлсөм Хисаметдинованын, мәҙәниәт йорто директоры Рита Дилмөхәмәтованын өлөшө ҙур. Педагогик хеҙмәт ветераны Ленира Шәйәхмәтова әйтеүенсә, был тәнгәлдә смаҡтар элек-электән әүҙем булған, ауыл, колхоз тормошондағы һәр башланғысҡа, яңылыҡҡа дәррәү ылығып, берҙәм, дуҫ йәшәгән. Эйе, ауыл татыу, матур ғаиләләргә  бик бай: Тимергөл һәм Радик Ғәлимовтар, Вера һәм Марат Йәнбирҙиндар, Рәсимә һәм Ришат Шаһмановтар, Ленира һәм Тимербай Шәйәхмәтовтар, Гөлсөм һәм Хәләф Хисаметдиновтар, Минзилә һәм Сынтимер Мәҡсүтовтар, Фәйрүзә һәм Наил, Ләйсән һәм Илгиз Таштимеровтар, Зәлиә һәм Салих Байгилдиндар, Кинйәбикә һәм Әбүталип, Земфира һәм Әхтәм, Регина һәм Илгиз, Эльвира һәм Ильмир Юлмөхәмәтовтар, Рәмзиә һәм Әхәт Иманғоловтар, Ләлә һәм Рафаил Ғалимовтар, Мөнирә һәм Рәйес Шәриповтар, Ғәлиә һәм Нурислам Татлыбаевтар, Минлебикә һәм Сәйетгәрәй Шаһмановтар... Ололар йәштәр менән ярышып донъя көтә. Кем менән генә һөйләшмә, бөтәһенен дә күнелдәре көр, тормош менән ҡәнәғәт кеүек тойолдо.

### Һыуһыҙлыҡ теңкәгә тейә

Хаталанғанмын икән. Смаҡтарҙың  да хәл итәһе проблемалары байтаҡ булып сыҡты. Бөгөн шуның иң мөһиме – һыуһыҙлыҡ. Ужа йылғаһын быуғандан алып ҡойоларҙа һыу юғалған. Бигерәк тә быйылғы эҫелә һыуһыҙ этләнә улар. Иртән ике-өс күнәк алып ҡалһаң ҡалаһың, алмаһан сәйлек тә һыу ҡалмай, тиҙәр. Ауыл халҡынан ҡултамға йыйып, ҡайҙа ғына ярҙам һорап мөрәжәғәт итмәгәндәр, һәр төрлө ҡабул итеүҙәргә йөрөгәндәр, хәҙер Интернетҡа сығырға уйлайҙар. Йылға ярындағы меңйәштәр тирәктәр ауа башлағас, ауыл халҡы, ысын мәғәнәһендә, хафаға ҡалған.

Икенсе мөһим мәсьәлә - күренекле йәмәғәт эшмәкәре, билдәле яҙыусы Динис Бүләковтың йорто сит кешеләр ҡулында булыуы. Башҡорт ауылдарын хас булмаған күренеште осратып барып индем ул ихатаға: бөтә урамға яр һалған һарыҡ тауышы иғтибарымды йәлеп иткәне (мал йәнле халҡым бер

ҡасан да ҡураһындағы малын баҡыртыуға юл ҡуймай). Картуф баҡсаһынын буйынан-буйына теплица ултыртҡандар, әммә йорт-ҡаралты ныҡ иҫкереп, ташландыҡ хәлдә булып, урамдың йәмен ебәреп ултыра.

Ауыл халҡы киләсәктә билдәле яҡташынын эҙен һаҡлаған ихатала йорт-музей ойошторолоп, йәш быуынға илһөйәрлек, тыуған ергә тоғролоҡ символы булып хеҙмәт итер тигән уй-өмөт менән йәшәй.

**3. Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Осрашканда туған-ырыу күңелдәрҙә шатлыҡ кабына [Текст] : 12+**
**// Көнгәк. - 2012. - 9 август. - Б. 2-3.**

*Атай-олатайҙарҙан мираҫ итеп алған рухи хазиналарҙан эске юғары мәҙәниәтлекте, рух ныҡлығын, бөтөнлегөн, дәрәжәле сабырлыкты юлдаш итеп көн итеүсе, эшсәнлек һәм бөтмөрлөк менән билдәлелек яулаған Мәләүез төбәгенең данын һәм котон һаҡлаусы Смаҡ ауылы кешеләре «Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!» байрамына йыйылды. Был көндә туғандар, дуҫ-иштәр, һабаҡташтар осрашты, алыҫ араларҙы яҡынайтып, ашҡынып ҡайтҡандар күрешеү минуттарында ҡабатланмаҫ ҡыуаныстар кисерҙе. Халкыбыҙҙың арҙаклы улы Кинйә батыр ир арыҫланы булып донъяға килгән, күп күренекле шәхестәр канат нығыткан Нөгөш, Ужа буйҙары был көндә йыр-моңға тулды, шатлыклы йөҙҙәр яктылығынан нурланып балкыны.*



***Ҡунаҡтартарға – икмәк – тоҙ, яҡты йөҙ***



***Ҡыҙҙар “Йөҙөк һалыш” уйнап алырға ла өлгөрҙө***

**Һәр урамдың үҙ йәме, үҙ ҡото**

Смаҡ ауылы районда күркәмлеге менән айырылып тора. Төҙөкләндереү буйынса даими тәүге урындарҙы яулай. Ауылға ингән һәр кеше төҙөк, йыйнаҡ беренсе урамға иғтибар итмәй ҡалмай. Байрам ошонда башланды. Йола буйынса мәртәбле ҡунаҡтарҙы икмәк-тоҙ, яҡты йөҙ менән ҡаршы алдылар. Урам халыҡ күңелендә изге һәм оло эштәре менән иҫтә ҡалған, оҙаҡ йылдар хужалыҡ рәйесе вазифаһын намыҫ менән башҡарған Миңләхмәт Йомағолов исемен йөрөтә. Был тарафта егәрлеауыл эшсәндәре, йәш быуынға төплө белем биреүсе уҡытыусылар ғүмер итә. Балалар тәрбиәләүгә күп көс һалған мәғәриф алдынғыһы Фәүзиә Йомағолова ҡунаҡтарҙы ихлас тәбрикләне, күршеләре, ауылдаштары хаҡында йылы һүҙҙәр әйтте һәм яҡындары, хеҙмәттәштәре араһынан иртә киткән тормош юлдашына арнап, һағыш һәм һөйөү менән һуғарылған шиғыр юлдарын уҡып ишеттерҙе. Байрамға йыйылған һәр кем һый-ниғәмәттән ауыҙ итте, борондан быуындан-быуынға тапшырыла килгән ҡул эштәре күргәҙмәһен ҡараны. Апалы-һеңлеле Венера, Рәмилә, Нурзилә Байгилдиналарҙың оҫта бейеүе сараға йәм өҫтәне.



***Йомаголов урамы ҡунаҡ ҡаршылай***

24 йортто берләштергән үҙәк урам халҡы бөтәһенән дә уҙҙырҙы. Күсер егет Фәнис Шаһманов таҫма, таҫтамал, ҡыҙыл буҫтау менән биҙәлгән атлы арбаға ҡунаҡтарҙы ауыл осонан байрам өҫтәле янына “һә” тигәнсе алып барып еткерҙе. Һыйҙан һығылған табын артында ҙур хөрмәткә лайыҡ аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр урын алды. Ошо урамдың уңған килендәренең береһе Дилә Шәрипова байрам айҡанлы ҡотланы һәм ҙур ғорурлыҡ менән, бер ғаилә булып ойошоп, татыу йәшәүҙәрен хәбәр итте, уңыштарын барланы. Быйыл ике яңы йорт ҡалҡып сыҡҡан. Оло быуын вәкилдәренең һәр беренсеһе тыуған ауылында намыҫлы хеҙмәт юлы үткән. Оҙаҡ йылдар ҡулға-ҡул тотоношоп ата-әсә бурысын намыҫ менән үтәүсе Флүрә һәм Камил Бикбаевтар, Тимергөл һәм Радик Ғалимовтар, Зөлфиә һәм Әхәт Ғәбитовтар-өлгөлө ғаилә. Быйылғы ҡоро шарттарҙа ла төрлө йәшелсәнән мул уңыш алыуҙарына ишаралған “Уңғандарҙың уңышы” күргәҙмәһе бәйләм, сигеү өлгөләре, ҙур зауыҡ менән биҙәп сығарылған махсус стена гәзите бында йәшәүселәрҙең байрамға ҙур теләк менән, ныҡлы әҙерләнеүен күрһәтә.



***Заман машиналарынан һис тә кәм түгел!***

Данлыҡлы яҡташтары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, күренекле яҙыусы Динис Бүләков исемен йөрөтеүсе урам халҡы: “Һаумыһығыҙ, әйҙә һаулашайыҡ, йылы һүҙҙән сафлыҡ бөркөлһөн. Бәхет, шатлыҡ менән бөтә ғүмергә хәтерҙә ҡалһын ошо көн”, - тип сәләмләп ҡаршы алды. Урам тарихы 20-се быуат башына барып тоташа. Смаҡ ауылының иң тәүге урамында 1905 йылда Ғәтиәт Бикбаев мәсеткә нигеҙ һала. Ул осорҙа иман йорто әлеге балалар баҡсаһы урынында урынлашҡан, революциянан һуң унда мәктәп асылған. Халыҡҡа тәүге медецина ярҙамы күрһәтеү пункты ла ошо тәңгәлдә төҙөлгән. Уҡытыусы Лилиә Мәҡсүтова, матур йорттарҙа ғүмер итеүсе яҡташтарының һәр береһен ололап, маҡтау һүҙҙәре еткерҙе. Клара һәм Әнүр Хөсәйеновтарҙың 45 йыл өлгөлө ғүмере ошо тарафта бергә үткән. Миңзилә, Флүрә Шаһмановалар, Хөснә Иманғолова апайҙар, 4-әр бала тәрбиәләп, уларҙы намыҫлы, лайыҡлы йәшәргә өйрәткән, колхозда тырышып эшләп, хаҡлы ялға сыҡҡан. Зөләйхә һәм Булат Файзуллиндар, Рәйсә һәм Сәлим Бикбаевтар, Лилиә һәм Сынтимер Мәҡсүтовтар үҙҙәрен иң егәрлеләр тип танытҡан. Баныу һәм Тәлғәт Хәйбуллиндарҙың икеһенең бергә 85 йыл хеҙмәт стажы бар.



*Изге уразаға бағышлап аят укылды*



***Динис Бүләков урамы акһакалдары***

Һул яҡ яр һәм Уң яҡ яр урамдары ла “Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!” байрамына юғары кимәлдә әҙерләнгән. Тантана үтәсәк урынға урамдың макетын эшләп ҡуйғандар. Илаһи моң таратып ҡурай уйнаны,күңелле йырҙар яңғыраны, ризыҡ төрлөлөгөнән, милли аштарҙан өҫтәлдәр һығылды. Үткән быуаттың 60-сы йылдар башында Биктимер Байгилдин, Адил Абдуллиндар тәүге нигеҙ таштарын һалған төбәктә бөгөн тормош ҡайнай. Һуңғыһы ветврач булып эшләгән. Оҙаҡ йылдар алыҫ араға йәйәү йөрөп, яҡташтарына шәфҡәтлелек күрһәткән оло йөрәкле Мәрхәбә Йәнбирҙина, ветеринария белгесе Тимерғәли Асылбаевтар йәшәй бында. Шуға ла был осто “медиктар урамы” тип тә әйтә атайҙар. Мәрхәбә апаә бай табын әҙерләгән, улар тормош иптәше Зәки ағай менән 60 баш умарта тотоп, гөл кеүек баҡса үҫтереп йәшәйҙәр. Изге әсәләр-ауыл күрке. Фирүзә Сафина, Гөлйемеш Аҫылбаевалар “Әсәлек даны” миҙалы менән бүләкләнгән.

Көн үтә эҫе тороу сәбәпле байрамдың икенсеһе яртыһы ауыл мәҙәниәт һарайында үтте.

## Улар менән ғорурлана смаҡтар

Динис бүләков исемендәге мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Гөлмизан Таштимерова ысын күңелдән байрам менән ҡотланы һәм ошо бәрәкәтле ерҙә тыуып тыуған төйәгенең данын арттырған шәхестәрҙе атап үтте. Билдәле яҙыусы Динис Бүләков, ауыл хужалығы фәндәре докторы Зиннур Бикбулатов, Дәүләкән районы Хакимиәте башлығы Закир Бикбулатов, атомсы-ғалим Ирек Бикбаев, Башҡортостандың халыҡ артисы Тәнзилә Үҙәнбаева, тарих фәндәре докторы Усман Ғайсин, Шәйехзада Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, композитор Юлай Үҙәнбаевтар – яҡташтары ғорурлығы. Беренсе башҡорт Хөкүмәтенең мәғәриф министры Муса Смаҡов исемен халыҡ ҙур хөрмәт менән иҫкә ала. Үҙенең шәжәрәһен дауам итеүсе үҙешмәкәр композитор Муса Смаҡов – Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, 15 уҡытыусыны берләштергән Таштимеровтар династияһы йәш быуын күңеленә изгелек, әҙәп, милли рух орлоҡтары һалып дан ҡаҙанды. Көндө төнгә ялғап, эшкә егелгән уңған механизаторҙар, водителдәр, мал ҡараусылар, талантлы уҡытыусылар бөтәһе лә ауылдың бәҫен күтәреүселәр, тыуған төйәктә йәшәү утын һүндермәй һаҡлаусылар. Был урында Мөнирә Шәрипова, Хәмиҙә Юлмөхәмәтова, Нарс һәм Фәрит Шаһмановтар, Миңләхмәт Әлимғужин,

Гөләмзә Имамова, Нурислам Татлыбаев, Наил Таштимеров, Әхтәм Ибраһимов һәм башҡа бик күптәр атап үтелде.

### Башҡаларҙы һоҡландырып йәшәүсе иң-иңдәр

Ошо күркәм байрамды ойоштороусыларҙың береһе Арыҫлан ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Айрат Шәйәхмәтов әүҙемлек, яуаплылыҡ өсөн яҡташтарына һәм бағымсылар – "Нөгөш" йәмғиәте рәйесе Самат Мәксүтов, эшҡыуарҙар Салауат Әлимғужин, Фаягөл Ҡунаҡбаеваларға рәхмәт һүҙҙәре еткерҙе һәм киләсәктә лә ауылдың йәмен, күркен ебәрмәҫкә саҡырҙы.



*Күргәҙмә байрамды йәмләне*

Күркәм тормошто йәмләп, сабыйҙар тыуыуы ҡыуаныслы. Ауыл халҡы өсөн яратып – һөйөп өс бала тәрбиәләү – ғәҙәти күренеш. Артабан сәхнә түренә 4-5 бала тәрбиәләүсе Гөлйемеш һәм Тимерғәли Аҫылбаевтар, Фирүзә һәм Рәфис Сафиндар, Ришат һәм Рәсимә Шаһмановтар, Ләйсән һәм Илгиз Таштимеровтар, Роза һәм Ринат Бикбулатовтар саҡырылды. Ҡатын-ҡыҙҙар советының урындағы бүлексәһе рәйесе Нәсимә Суҡбаева уларға иҫтәлекле

бүләктәр тапшырҙы. Ауыл иманын һаҡлаусы инсафлы ағинәйҙәр һәм аҡыл эйәһе аҡһаҡалдарға ла хөрмәтләү һүҙҙәренең иң йылыһы еткерелде. Уларҙың иң өлкәне Ғәйникамал Шаһмановаға 95 йәш. “Иң түҙемле ҡәйнә-килен” исеме 37 йыл ҡәйнәһе һәм 13 йыл төпсөк улының килене менән татыу йәшәүсе Тимергөл Ғәлимоваға бирелде.

“Өлгөлө” тигән маҡтаулы исемгә Динис Буләков урамы лайыҡ булды. Шулай уҡ иң күп сәскә үҫтереүсе хужабикәләр араһында Зөлфиә Яманаева, Мөнирә Әлимғужина, Гөлмизан һәм Ләйсән Таштимеровалар, Дилә Шәрипова бүләкләнде. Иң өлгөлө йорт хужалары Сания һәм Ғәлим Туҡаевтар, Фәриҙә һәм Фәрит Үҙәнбаевтар, Миңзилә һәм Зөфәр Мәксүтовтар, Флүрә һәм Камил Бикбаевтарҙы залда ултырыусылар ҡайнар алҡышланы.



Бөтә еңеүселәрҙе тәбрикләп, дәртле бейеү һәм моңло йыр яңғыраны. Шулай уҡ 55 йыл бергә, иңгә-иң терәшеп, бәхетле йәшәүсе, лайыҡлы балалар үҫтереүсе Тәнзилә һәм Шамил Әбдрәшитовтарға ла бүләк тапшырылды.

***Хөрмәтле ҡунаҡ Рәйлә Бүләкова осрашыуға сикһеҙ шат***

Мәртәбәле ҡунаҡтарҙан иң беренсе Рәйлә Бүләкова телмәр тотто. “Һаумыһығыҙ, ауылдаштарым! – тип башланы ул сығышын, - шулай өндәшергә хаҡлымындыр, тип уйлайым. Бөтә күңелем менән шатланып ултырам. Динис Мөҙәрис улын халҡыбыҙға биргән тырыш, эшсән, даланлы кешеләргә һоҡланыуым сикһеҙ”.

Рәйлә Мөхәмәт ҡыҙы тормош иптәшенең өләсәһенән ҡалған еҙ ҡомғанды, Рәми Ғарипов үҙ ҡулы менән яҙып, ҡәләмдәштәренә тыуған көнөнә бүләк иткән картинаны Динис Бүләков музейына тапшырҙы. Халыҡ

хуплап, дәррәү алҡышланы. Ошо урында Өфө ҡунағы, Динис Бүләковтың ейәнсәре Рита Изотова матур йыр башҡарҙы.

Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған артисы Тәнзилә Үҙәнбаева изге айҙа ойошторолған изге байрам мөбәрәк булыуын теләне, матур сараны ойоштороусыларға рәхмәт һүҙҙәре еткерҙе. Башҡортосандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Флүрә Үҙәнбаева ауылдаштарын дәртле йыр менән ҡотланы.

Шәғирә Мәрйәм Күсмәева Бөтә Донъя башҡорттары ҡоролтайының Мәләүез бүлексәһе исеменән хөрмәтле ҡунаҡтар Рәйлә Бүләкова һәм Тәнзилә Үҙәнбаеваға Рәхмәт хаты, Нәсимә Суҡбаева һәм Кинйәбикә Юлмөхәмәтова, Гөлсөм Хисаметдиноваларға Маҡтау ҡағыҙы тапшырҙы. Сәхнәләге тамаша ауыл һәүәҫкәрҙәре әҙерләгән Сөмбөлә байрамы менән тамамланды.

Кискә табан бөтә ауыл халҡы Ужа буйында йыйылды. Дәртле музыка, шат тауыштар яңғыраны. Хәл-әхүәл һорашыу, аралашыу минуттары дауам итте.

4. **Абдрахманова, Лена Күңел донъяһын тултырыусы утрау [Текст] : 12+ // Көнгәк. - 2002. - 29 июнь. – Б. 3.**

*Музейҙар кеше күңелен нимә менән арбай? Иң беренсе, моғайын, күңелдәге бушлыҡты тултырыуы менәндер. Смаҡ ауылы мәҙәниәт йортонда урынлашкан Динис Бүләков музейы ла – шундай урындарҙың береһе.*

Был музей билдәле яҙыусы, Башҡортостан Республикаһының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премия лауреаты Динис Мөҙәрис улы Бүләковтың иҫтәлегенә арнап, 1996 йылда, әҙиптең тыуған көнөндә, 18 майҙа асыла. Ишектән инеү менән Динис Бүләковтың рухи донъһы уратып ала. Ул сабый сағында аҡ биләүҙә ятҡан сәңгелдәгенән алып шәхси әйберҙәре үҙ урынын алған. Ошо ҙур булмаған музейҙағы экспонаттарға, фотоларға, ҡулъяҙмаларға, хаттарға бер күҙ йүгертеп сығыу менән уның бөхтә, тәртип яратҡан, тормош һөйөүсән, донъялағы ваҡлыҡтарҙан азат кеше икәнен күреп, яратып өлгөрәһең.

-Музейҙың ишеге йыл әйләнәһенә ябылмай, тиерлек. Кескәй йәштәге балалар ҙа, үҫмерҙәр ҙә, оло йәштәге, төрлө дәрәжәләге кешеләр ҙә, күрше райондарҙан да, сит илдәрҙән дә киләләр бында һәм, әйтергә кәрәк, береһе лә

Динис Бүләковтың ижадына, тормош юлына битараф түгел, - ти музей мөдире Дилә Шәрипова.

-Мине, ҡатын-ҡыҙҙар советының рәйесе булараҡ, башҡорт ҡыҙҙарының, әсәйҙәрҙең яҙмышы борсой. Яҡташыбыҙҙың әҫәрҙәре, геройҙары, тәрбиәүи әһәмиәткә эйәбулған тормош ваҡиғалары аша тәрбиәләгем килә һәм шулар өҫтөндә эшләргә тырышам. Беҙҙең программала йолаға ярашлы никах теркәү, төрлө байрамдар үткәреү, эскән ҡатын-ҡыҙҙар менән көрәш алып барыу кеүек саралар бар. Бөтәһенә лә өлгәшеү өсөн, Динис Бүләковтың геройҙары, әҫәрҙәренең протиптары менән танышыу мотлаҡтыр, тип уйлайым.



***Музей мөдире Дилә Шәрипова килеүселәрҙе ихлас ҡаршы ала***

5. **Хисаметдинова, Сөмбөл. Ауыл хәбәрсеһе [Текст] : 12+ // Көнгәк. - 2002. – 14 декабрь. - Б. 2.**

***Әхтәм Хисаметдинов. Был исемде “Октябрь юлы”, “Көнгәк” гәзиттәрендә сыҡҡан төрлө мәҡәләләр аша Мәләүез районында белмәүселәр юҡтыр. Тирә-яҡта абруй яулаған был кеше – минең олатайым. Уның ауылдаштары, яҡташтары алдында хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ.***

Ғүмере буйы тыуған яҡ тарихын, кешеләрен өйрәнеп, эҙләнеп йыйған материалдарын халҡына еткергә ынтылды ул. Кемдәр менән генә осрашып һөйләшмәһен, изге күңелле, кеселекле, ярҙамсыл булып хәтерҙә ҡала. Район

гәзитенең штаттан тыш хәбәрсеһе булараҡ, үҙенең яҡташтары, маҡтауға лайыҡ ғаиләләр хаҡында күпме матур мәҡәләләр яҙҙы олатайым.

Тыуған яҡты өйрәнеүсе булараҡ, иң беренселәрҙән булып Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусылар тураһында “Хәтер” альбомдарына материал туплау, сығарыу өсөн бик күп көс һалды. Был эшкә мәктәп уҡытыусыларын, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен йәлеп итте. Альбомдар бөгөн Арыҫлан урта мәктәбендә һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында һаҡлана. Бынан тыш уның “Арыҫлан ауыл Советы тарихы”, “Нөгөш колхозы тарихы” исемле хеҙмәттәре бар. Бөгөн олатайым Динис Бүләков исемен йөрөткән мәктәптең йылъяҙмаһын туплау, йыйыу өҫтөндә эшләй. Мине лә ошо эшкә йәлеп итте. Мәктәптең 75 йыллыҡ юбилейына өлгөртөргә хыяллана.



***“Нөгөш” колхозының элекке рәйесе Миңләхмәт Йомағолов (хәҙер мәрхүм инде) һәм бухгалтер Әхтәм Хисаметдинов (фото ғаилә архивынан)***

Яҡташ яҙыусы Динис Бүләковҡа Смаҡ ауылында музей асыу һәм уның исемен мәңгеләштереү өсөн барған эште лә олатайым башланы. Үҙенең ихтыяр көсө, ялҡынлы һүҙе менән кешеләрҙе эшкә ойоштора, артынан эйәртә алырҙай шәхес. Күп йылдар ул мәктәптә почетлы пионер, ҡунаҡ булып сығыш яһаны, үҙенең хеҙмәттәрен туған мәктәбенә лә бүләк итә килде.

Бөгөн олатайым хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, тормошо әле лә гөрләп бара. Кәңәш, ярҙам һорап килеүселәр өҙөлмәй. Һәр береһенә йылы һүҙен дә, кәңәшен дә йәлләмәй ул.

Борондан беҙҙең халыҡ һәр бер башҡорт үҙенең 7 быуынын белергә тейеш, тип иҫәпләй. Ошо йәһәттән олатай-өләсәйҙәрҙең ғаиләләре баһалап бөткөһөҙ булған. Бөгөн был ролдең әһәмиәте тағы ла көслөрәк булырға тейештер, сөнки беҙ йәшәгән заман бик ҡатмарлы, күп ҡиммәттәр үҙ баһаһын юғалтты, оло быуын менән йәштәрараһында бәйләнеш юғала бара, сит-яттарға табыныу көслө. Олатайым беҙгә был йәһәттән бик ныҡ иғтибар бүлә. Уға көслө рухлы булғаны өсөн рәхмәт!

Ошо көндәрҙә олатайыббыҙҙың юбилейы – уға 70 йәш. Ошо байрамы менән ғәзиз кешебеҙҙе ҡайнар ҡотлайбыҙ.

**6. Ишбулатова, Айзирәк. “Минен яҙмышым ғәзиз халҡым менән” [Текст] : 12 +**
**// Көнгәк. - 2008. - 15 ғинуар. - Б. 2.**

***Смакта Миңләхмәт Йомағоловтың Хәтер кисәһе үтте***

Халыҡ күп йыйылды, ҡырҙан ҡайтыусылар ҙа байтаҡ ине. Уларҙы фойела ойошторолған күргәҙмә Миңләхмәт Мөхәммәт улының тормош юлы, унынң фиҙәкәр тырышлығы һөҙөмтәһендә өлгәшкән уныштар “Нөгөш” хужалығы һәм кешеләре ҡаҙаныштары менән таныштырҙы.

Миләхмәт Йомағолов, сағыу йондоҙ кеүек, балҡыны ла иртә атылды. Ул янып йәшәне, бөтә йөрәк йылыһын, күнел яҡтылығын башҡаларға өләште. Яҡташтары, унын сирек быуатҡа яҡын туған колхозын етәкләгән осорға бағып, тәжрибәһен өйрәнеп, урындағы хужалыҡтын элекке данын, ҡеүәтен тергеҙергә, ҡотон ҡайтарырға өмөтләнә. Ваҡытында ул ауылдарға тәүгеләрҙән булып “зәнгәр яғыулыҡ” индереп, яҡташтарын һөйөндерҙе, асфальт юл һалдырҙы, белгестәргә йорттар, балаларға интернат-мәктәптәр, социаль объектар төҙөттө. Заман һулышын яҡшы тойған етәксе колхоздын үҙ тирмәне, мал өсөн ҡатнаш аҙыҡ цехы булдырыуға, яны тармаҡтар үҫтереүгә өлгәште.



***Миңләхмәт Йомағоловтың ғаиләһе***

Күптәрҙен яҙмышы Миңләхмәт Мөхәммәт улына бәйләнгән, шуға ла кисәлә ололар йәшлегенә, йәштәр бала сағына ҡайтҡандай булды, яҡты донъянан

киткән туғандарын, яҡындарын иҫкә алды. Күнелдәрҙе һағыныу һағышы менән бергә шундай шәхес менән бер дәүерҙә йәшәгән, бергә эшләгән өсөн ғорурлыҡ тойғоһо биләне.

Хәтер кисәһен Миңләхмәт Йомағоловты яҡшы белгән уҡытыусылар Ленира Шәйәхмәтова һәм Ғәлиә Татлыбаева алып барҙы. Кисә бик йылы, ихлас мөхиттә үтте. Миңләхмәт Мөхәммәт улы рухы бөтәһен берләштерҙе, тулы зал һәм сәхнә бер бөтөн булып тиҫтә йылдар элек үткән ваҡиғаларҙы барланы, һәр кем үҙ иҫтәлектәре, уй- кисерештәре менән уртаҡлашты. 24 йыл алмаштырғыҙ колхоз рәйесенең ғүмере ҡыҫҡа булһа ла, башҡарған эштәре ҙур, халҡына, иленә хеҙмәте, изгелеге баһалап бөткөһөҙ. Шулай уҡ уның менән бергә эшләгән, уның уй-ниәтен тормошҡа ашырырға ярҙам иткән хеҙмәттәштәре, яҡындарынын исеме лә янғыраны. Уларҙын фиҙаҡәр хеҙмәте, ҡалдырған яҡты эҙҙәре алдында баш эйҙе яҡташтары һәм бер минут тынлыҡта уларҙы иҫкә алды.

Артабан алып барыусылар Янауыл ауылында тыуып үҫкән, тәүге аҙымдарын яһаған Миңләхмәт Мөхәммәт улының бала сағын күҙ алдына баҫтырҙы. Һуғыштан ирен көтөп ала алмаған әсәһе Әсмә инәй өс ир-азаматына – Миҙхәт, Әхәт, Миңләхмәт улдарына – лайыҡлы тәрбиә биргән. Алтынсы синыфтан ҡанат аҫтына алып, белем генә түгел, тормош һабаҡтары ла биреүсе синыф етәксеһе Мәрүәр Сөләймәнова уның бәләкәйҙән спорт яратыуы, сәмле, тырыш булыуы, мәктәпте тик “бишле” билдәләренә генә тамамлауы тураһында һөйләне. Булыр бала бишектән, тиҙәр, Миңләхмәт ағайҙың да бала саҡтағы яуаплылығы, әүҙемлеге, һәләте уға һәр саҡ алдынғы булырға, һәр эштә уңышҡа өлгәшергә ярҙам итә. 1968 йылда Башҡортостан ауыл хужалығы институтын ҡыҙыл дипломға тамамлай. Институттан һуң тыуған колхозында агроном булып хеҙмәт юлын башлай. Туҡтауһыҙ эҙләнеүҙәр, яңы технологиялар үҙләштереү һөҙөмтәһендә игенселектә юғары уңыш алыуға өлгәшә. Йәш белгескә хужалыҡты етәкләү бурысы йөкмәтелә. Миңләхмәт Мөхәммәт улы дәртләнеп эшләй, яңы пландар, ил ғәме менән йәшәй. Алып барыусылар эш йылдары, тормош юлы менән таныштырғанда уҡытыусы Иршат Хисаметдинов хәтирәләрҙе йәнләндерҙе – ғаилә архивындағы фоторәсемдәҙе проектор аша
күрһәтте.

Артабан бөтә эште тормошҡа ашырырға ярҙам итеүсе илһам сығанағы тормош иптәше, ин яҡын, тоғро дуҫы Фәүзиә Муса ҡыҙы уны ябай кеше, ғаилә башлығы булараҡ асты. Был көндө күптәр талапсан, эшлекле, көслө ихыярлы етәкселә ғаиләһен юғары баһалаған, йөрәге йыр-моңға тулы, сәнғәткә ғашиҡ, хаҡлы ялға сыҡҡас – картиналар яҙыу хыялы менән йәшәгән нескә күнелле кешене күҙ алдына баҫтырғандыр, моғайын. Миңләхмәт ағайҙың уңышлы эшмәкәрлегендә ҡатыны Фәүзиә апайҙын роле ҙур, һәр уңышта уның да өлөшө бар.

Булмышы менән шағирә, ике юғары белемле белгес, талантлы уҡытыусы, хәстәрлекле әсә, сабыр, тоғро ҡатын Миңләхмәт ағайҙың ун ҡанаты була. Ана шул пар ҡанаты булғанға ла юғары оса алғандыр ул.

Фәүзиа апай уның тураһында айырым йылылыҡ, ихтирам менән һөйләй: “Кешеләргә хеҙмәт итеүҙә үҙ бәхетен тапты, мөмкин булһа, Әхмәткә арнап һәйкәл ҡуйыр инем”, - ти ул.




***Фәүзиә Муса ҡыҙы Йомағоловтарҙың шәжәрәһе менән таныштырҙы***

Миңләхмәт ағайға тере һәйкәл – унын дауамы – балалары: ике улы Азат, Иршат, ҡыҙы Фәйрүзә, инде артабан ырыуҙы дауам итеүсе биш ейән-ейәнсәре. Фәүзиә Муса ҡыҙы Йомағоловтарҙың ете быуын шәжәрәһен төҙөгән. Шәжәрә йола буйынса уны дауам итергә тейешле һигеҙенсе быуын вәкиле Динар ейәненә тапшырылды. Йомағоловтарҙың балалары ла һәләтле, улар ата-әсәһе менән ғорурланһа, үҙҙәре лә - лайыҡлы алмаш.

Бөгөн Миңләхмәт Йомағоловтың эшен дауам итеүсе йәш, маҡсатлы рәйес Самат Мәксүтов сығышында Миңләхмәт Мөхәммәт улының шәхесе, эштәре хәҙерге көндә лә өлгө булыуын билдәләне һәм уның яҡты иҫтәлеге хөрмәтенә тормош иптәше Фәүзиә апайға бүләк тә тапшырҙы. Кисәлә шулай уҡ Миңләхмәт Йомағоловтың туғандары, синыфташтары, йәшлек дуҫтары, хеҙмәттәштәре иҫтәлектәре менән уртаҡлашты.

Смаҡ мәҙәниәт йорто һәүәҫкәрҙәре Нәсимә Суҡбаева, Рәмзиә Иҫәкәева, Фәнил Яманаев, музыкаль етәксе, композитор Муса Смаҡов Йомағоловтарҙын яратҡан, уларға арналған йырҙарҙы башҡарҙы.

“Үлгәндәрҙен ҡәберен бел, иҫәндәрҙен ҡәҙерен бел”, тип йырҙа йырланһа, тормошта ла шуны күҙәтеү зарурҙыр. Әлегә, уны күреп белгәндәр иҫән саҡта, ул халыҡ күңелендә тере, эштәре лә күҙ алдында, ә ваҡыт аяуһыҙ, шуға күрә кисәлә Миңләхмәт Йомағоловтың исемен мәңгеләштереү өсөн һәйкәл ҡуйыу, музейен асыу, колхоздың элекке данын ҡайтарып, унын исемен биреү тәҡдимдәре тормошҡа ашһын ине. Ундай шәхестәр онотолорға тейеш түгел, уларҙың тормошо, изге эштәре ябай кешенең бөйөклөгөн, йәшәйештең ысын мәғәнәһен аса, уйланырға, дөрөҫ юл табырға ярҙам итә.

***Йылы һүҙ – йән аҙығы.***

***Хөрмәтле тормош иптәшем Миңләхмәт Йомағоловтың яҡты донъянан китеүенә инде 15 йыл уҙҙы. Ошо айҡанлы, 5 ғинуарҙа Смаҡ мәҙәниәт йортонда уға арналған Хәтер кисәһенә килеүселәр уға тәрән ихтирам һаҡлауын һәм улар күңелендә йәшәүен күрһәтте. Беҙҙен ҡәҙерле кешебеҙҙе шулай ҙурлағандары өсөн етәкселәргә - Самат Мәҡсүтовҡа, Динис Иҫәкәевҡа, кисәне ойоштороусыларға, унда ҡатнашыусыларға, бөтә ауылдаштарға, туғандарға, килгән ҡунаҡтарға ҙур рәхмәт, уларға ныҡлы сәләмәтлек, ғаилә бәхете, эштәрендә уңыштар, донъя именлеге теләйбеҙ.***

***Ҙур ихтирам менән Фәүзиә Йомағолова, балалары.***

**7. Фәйзуллина, Әлиә. Эй, был ҡулдар – бесән сапты, иген үҫтерҙе... [Текст] : 12 + // Көнгәк. - 2015. - 25 апрель. - Б. 4.**

***Ҡурсалаусы һәм яҡлаусы. Сабырлыҡ һәм түҙемлек идеалы. Бөйөк Енеүҙе яҡынайтыуға үҙ өлөшөн индергән тыл хеҙмәтсәндәре исемлегендә минен өләсәйем Флүрә Фәйзуллина ла бар. Иненә төшкән ауырлыҡ, аслыҡ һәм ялангаслыҡты яҡташтары менйн бергә күтәрә.***



***Тыл ветераны менән фото***

Өләсәйем 1927 йылда Арыҫлан ауылында тыуа, күп балалы ғаиләлә тәрбиәләнә. Һуғыш башланған йылда етенсе класты тамамлай.

Аталары Кәлимулла япон милитаристарына ҡаршы һуғышта ҡатнашып, иҫән-һау әйләнеп ҡайта. Бөйөк Ватан һуғышына яҡындары менән хушлашыумөмкинлеге бирмәй, тура хеҙмәт армияһынан алалар, ҡатыны Гөлсөм (өләсәйемдең әсәһе) ауылда береһенән-береһе бәләкәй ете бала менән ҡала.

Өләсәйҙең тиҫтерҙәре һуғыш йылдарында колхозда төп эш көсө була, йәйен-ҡышын ферманан ҡайтып инмәйҙәр, кистәрен күмәкләп фронттан килгән хаттарға яуап яҙа, ҡул эштәре менән шөғөлләнә, аҙыҡ-түлек, кейем әҙерләй. Бесән сапҡан, мал тәрбиәләгән, иген баҫыуында сүп утаған, юғалтыу ҡайғыһы алдында ҡалған ауылдаштарына терәк тә булған улар.

Яҙғыһын ҡар һыуына сыҡҡандар, балтырған, ҡуҙғалаҡ, кесерткән, емеш-еләк йыйғандар. "Һуғыш йылдарында организмға аҙыҡ етмәүгә ҡарамай, файҙалы үлән,емеш ашап, йоғошло ауырыуҙарға бирешмәй үҫтек"-, тип хәтерләй ул. Тиҫтерҙәре Әлмира Таштимерова, Наил, Әкрәм Абдуллиндар, Рәмзиә Бураҡанова, Мәрйәм Әлмөхәмәтовалар менән һуғыш ауырлыҡтарын бергә күтәреүҙәре тураһында яҡты хәтирәләр һаҡлай.

Яҙҙан башлап ҡар яуғанға тиклем ялан эштәре менән шөғөлләнгәнгә күрә ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләп өлгөрмәгәндәр, шунлыҡтан ыжғыр буран, һалҡындарҙа урманға йөрөргә мәжбүр булғандар. Бер саҡ Бағра тауында йонсоу ат тауҙан оса, утынсылар тирә-яҡҡа һикереп, саҡ үлемдән ҡотола. "Аслыҡ-яланғыслығына түҙеп була, ә фронттан ҡара хәбәр килһә, ҡанаты ҡайырылған ҡоштарға оҡшап ҡала инек. Кешенең ҡайғыһын еңеләйтер һүҙҙәр табыу, ай-һай, ауыр", - тип хәтерләй өләсәй.

Һәр бөртөк бойҙай, туплаған уңыш өсөн яуаплылыҡ тойоп, 16 йәшендә МТС-та үлсәүсе булып эш башлай.

Еңеү көнө етә, фронттан беренсе һалдат ҡайтыуы, көслө ҡулдарҙа һабандың баҫыуҙы тигеҙерәк, тәрәнерәк һөрөүе, бесән осоронда ауылда яңынан салғы яныған тауыштар яңғырауы – тормоштоң яйлап үҙ яйына ҡайтыуы тураһында һөйләй. 1946 йылда өләсәйем Смаҡ ауылы егете Шакир Фәйзуллин менән тормош ҡора, ул 1939 йылда армияға алына, батыр һалдат Фин һуғышында ҡатнаша, ауылына тик 1945-се йылда әйләнеп ҡайта. Татыу ғаилә 8 бала тәрбиәләп үҫтерә, бөгөн шуларҙың алтыһы иҫән-һау. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, олатай 1968 йылда вафат була. Балаларын аяҡҡа баҫтырыу өсөн өләсәй ҡулынан килгәндең бөтәһен дә эшләй: медпунктта санитарка, китапханала йыйыштырыусы, интернатта кер йыуыусы, сөгөлдөр үҫтереүсе лә була.

Бөгөн ҡәҙерлебеҙ балаларының, ейән-ейәнсәрҙәренең ихтирамын тойоп йәшәй. Күҙҙәренә операциянан һуң яраҡлан "Көнгәк" гәзитен уҡый алмағанлыҡтан, беҙҙен уҡығанды йотлоғоп тыңлай.

Бына ошондай ябай, әммә иңдәрендә шул тиклем ауырлыҡ күтәреп, бөгөн күңеленә тик яҡшылыҡ һәм изгелек туплаған кешеләр йәшәй эргәбеҙҙә.

**8. Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Ғүмер юлы хөрмәткә лайыҡ [Текст] : 12 + // Көнгәк. - 2015. - 8 май. - Б. 4.**

***Оло йөрәкле,тормош һынауҙарына бирешмәгән һәм ныҡлы рухлы шәхестәр генә оҙаҙлы һәм маҡтаулы ғүмер кисереү бәхетенә ирешәләр. Былдай баһа бөгөн Смаҡ ауылында көн иткән һәм күптән түгел 98 йәшен теүәлләгән,ошондаә күркәм ғүмер юғарылығына ирешкән хеҙмәт ветераны, Бөйөк Ватан һуғышында башын ҙалған яугир ҡатыны Ғайникамал Шаһмановаға ла ҡағыла. Оло Енеү – 9 май көнөн халҡыбыҙ гәйәт ҙур көс түгеп һәм юғалтыуҙар менәняулап алыуына үҙ яҙмышы аша шаһит тол ҡатындарҙын береһе ул.***

Әлеге көндә хәтере ҡаҡшаһала, бала-сағын, атай-әсәһе күндергән өгөт-нәсихәтте һис онотмаған. “Әсәйем үҙе ололарҙан ишеткән теләктәрҙе беҙгә тапшырып, яҡшы күнелле, эшсән булырға өйрәтте”, - тип һөйләй ул. Смаҡ ауылынын данлыҡлы нәҫелдәренен береһе Шаһмановтар ғаиләһенә килен булып төшөүен, ире Абдулла Ҡәйүм улы менән бергә йәшәгән, игеҙәк ҡыҙҙары тыуған бәхетле осорҙо төш кеүек кенә хәтерләй ул. Йәш ғаилә нигеҙ ҡороп, тормошон яйға һалып китергә лә өлгөрмәй, һуғыш сыға. Абдулла Шаһманов та яу асылған тәүге көндәрҙән үк ил һаҡларға юлланған ауылдаштары, мендәрсә батыр ир-егеттәр кеүек ҡулына ҡорал ала. Яны тыуған бер айлыҡ сабыйҙарын, һөйөклө ҡатынын, тыуған төйәген, ғәзиз илен яҡлап 9 авгусында һуғышҡа китә.



*Хөрмәтле ағинәй Ғәйникамал Шаһманова*

Яҡындарына унан берҙән бер хат килә. Хыялын тормошҡа ашырып, Мурманск ҡалаһында моряк һөнәренә уҡыуын, һыу аҫты кәмәһендә һуғышырға өйрәнеүен хәбәр итә.

Шунан һуң уның менән бәйләнеш өҙөлә, ә 1942 йылда хәбәрһеҙюғалды тигән рәсми ҡағыҙ килә. Һәләк булған һалдаттың әлеге көндә Мәләүез ҡалаһында йәшәгән ҡыҙы һөйләүенсә, 1950 йылдар башында Шаһманов Абдулла Әйүп улының яуҙашын күреү бәхетенә ирешә. Ҡалала йәшәгән был уҙамандың исем-шәрифе хәтерҙәрендә ҡалмаған. Ул яҡындары тураһында бик ҡәҙерле хәбәрҙе еткерә. ”Атайымдын фротташ дуҫы икәүләп бер-береһенә терәк булып хәрби күнекмәләр үтеүен, һуғышҡа ингәс, күптәрҙен һәләк булыуын хәбәр итте. Бер утрау ярына сығалар, ни сәбәптәндер, ҡаты яралыларҙы һыу аҫты кәмәһенә алмай, ҡалдырып китәләр. Башынан ҡан һарҡылған атайым да шунда ятып ҡала...” – тип хәтерләй яугирҙын ҡыҙы.

Ирен юғалтыуҙан күнелен ҡара ҡайғы баҫһа ла, фронт өсөн, Еңеү өсөн башҡа ауыл ҡатындары менән ал-ял белмәй эшләй Ғәйникамал Мөхәмәҙи ҡыҙы. Яҙлы-көҙлө ер һөрөү, йәйен баҫыуҙар утау, бесән әҙерләү, мал көтөү кеүек йыл әйләнәһенә бер-береһен алмаштырып килгән бөтмәҫ мәшәҡәттәрҙе бала-саға, ҡатын-ҡыҙ һәм ҡарт-ҡоро намыҫ менән башҡара. Йөрәк әрнеүен эш менән баҫҡан улар. Ҡайғы ҡапҡа ҡаҡмаған ғаиләләр бик һирәк була. “Баш күтәрмәй колхоз эшен башҡарҙыҡ, ауыл ҡатындары оло хәсрәттәрҙе бергәләп күтәрҙе, күрше-күлән татыу, бер-беребеҙгә терәк булырға тырыштыҡ”, - ти ул михнәтле йылдарҙы иҫенә төшөрөп. Һуғыш бөтөү менән еңеллек килер тип өмөтләнһәләр ҙә, аслыҡ һәм яланғаслыҡ михнәте тиҙ генә сигенергә уйламай.



***Ғәйникамал һәм Абдулла Шаһмановтар***

Ҡул көсө талап иткән хужалыҡ эштәрен атҡарырҙай ирҙәрҙең күбеһе яуҙа башын һала, иҫән ҡайтҡандары ла яраларҙан мандый алмай. Сәсеү, урыу кеүек мөһим эштәр шул уҡ ҡатын-ҡыҙҙар һәм 10-15 йәшлек үҫмер малайҙар һәм ҡыҙҙар елкәһенә төшә. Ғәйникамал Мөхәмәҙи ҡыҙы бер эштән дә ҡалмай, ни ҡушһалар, шуны еӊ һыҙғанып башҡара. Хаҡлы ялға сығыр алдынан сөгөлдөр үҫтерә, сусҡа фермаһында эшләй, күп Маҡтау грамоталарына лайыҡ була.

Икенсе тапҡыр ғаилә ҡороп, бәхетен һынап ҡарай ҡатын, тағы ла бер сабыйы – Зәйнәбе доъяға килә. Ҡыҙҙарын наҙға күмеп, һөйөп үҫтерә. Үҙ хужалығында ла май аҫрай, ер эшкәртә, нисек тә балаларын туйҙырырға тырыша. Һөйөклө әсәһе ауыр сиргә дусар булып түшәккә йығылғас, уны ун биш йыл тәрбиәләй, бөтә көсөн һалып, хәлен еңеләйтергә ынтыла. Йөҙ йәштеӊ тупһаһына баҫҡанда имен-аман үҙ аяғында йөрөүе, балалары хәстәрендә йәшәүе моғайын, әсәй ризалығын алыуындалыр.

Ғәйникамал Мөхәмәҙи ҡыҙының күкрәген "1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм башҡа күп миҙалдар биҙәй. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы миҙал алыуына инәй бөтә күӊеленән шатлана һәм уның хеҙмәтен юғары баһалауҙарына рәхмәтле.

Изгелек, сабырлыҡ һәм тырышлыҡ менән үткән ғүмер көҙө һоҡланыуға һәм ҙур хөрмәткә лайыҡ.

9. **Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдыӊ, бәләкәс йөрәгемә [Текст] : 12 +**
   **// Көнгәк. - 2015. - 20 август. - Б. 2.**

Белемле педагог, оҫта һәм яуаплы ойоштороусы Гөлдәр Рәфҡәт ҡыҙы коллективта һәм ата-әсәләр араһында хөрмәт һәм абруй ҡаҙанған.Сағыу,мәғлүмәткә бай, ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс дәрестәре ашаш ул балаларҙа Тыуған илгә, әсә теленә һөйөү, кешелеклелек, әҙәп һәм яуаплылылыҡ тәрбиәләргә ынтыла, дуҫлыҡ һәм туғанлыҡтың ҡәҙерен белергә,йәмғиәткә файҙалы йәшәргә, тирә-йүндәге матурлыҡты күрергәөйрәтә.

Яратҡан тәүге уҡытыусыһы Рәйсә Ҡолмөхәмәтоваға булған ихтирамы ҡасандыр һөнәр һайларға ярҙам иткән. Гөлдәр Дауытова еӊелдән булмаған, түҙемлелек, ныҡышмалылыҡ,балаларға һөйөү һәм талапсанлыҡты талап иткән уҡытыусы һөнәренеӊ бәҫен, абруйын күтәрә, ошо күркәм сифаттары хеҙмәтендә уӊыштар яуларға булышлыҡ итә. Маҡсатҡа ынтылышлы, арымай-талмай үҙ эшенә бирелгән остаздыӊ уҡыусылары һынатмай. 2014-2015 уҡыу йылында башланғыс класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса республика олимпиадаһының район кимәлендә Рәмилә Байгилдина еңеүгә өлгәшкән, ә республика этабында икенсе баҫҡысты яулаған. Гөлшат Таштимерова республикала үткәрелгән "Фәнгә

тәүге аҙым” фәнни-ғәмәли конференцияһында призға лайыҡ була, ә районда урыҫ теле һәм әҙәбиәте олимпиадаһында уңышлы сығыш яһай һәм 3-сө урынға сыға. Әлбиттә, педагогтың хеҙмәтенә ниндәйҙер конкурс,олимпиядаларҙа яуланған урындар менән генә бер яҡлы баһа биреү бик дөрөҫ түгел. Ул оло тормошҡа аяҡ баҫтырған мәктәпте тамамлаусылар араһында үҙ ауылын, район-ҡаланы, республиканы данлап йәшәгән, намыҫ менән тыкған илен һаҡлаған, һайлаған һөнәрендә үрҙәр яулаған, матур ғаилә ҡороп, тәрбиәле балалар үҫтергән лайыҡлы граждандар бихисап. Уҡытыусының изге маҡсаты- уҡыусыларында тап ошо сифаттарҙы тәрбиәләүҙә.



*Гөлдәр Дауытова*

Уҡытыусы тигән бөйөк исемде аҡлар өсөн күп тырышлыҡ талап ителеүен яҡшы төшөнгән Гөлдәр Рәфҡәт ҡыҙы изге маҡсаттарына өлгәшер өсөн бөтә булмышын һалып, ваҡыт менән исәпләшмәй, тәбиғәттәнбирелгән һәләтен эшкә егеп, хеҙмәт итә. Белемен камиллаштырырға ла ваҡыт таба. Бынан тыш ауыл ерендә йәшәгәндәрҙең хужалыҡ эштәре, ғаилә мәшәҡәттәрен дә онотоорға ярамай. Ул – булдыҡлы хужабикә, улы һәм килене, ҡыҙына үрнәкле әсәй.

1 сентябрь – Белем көнөндә Гөлдәр Рәфҡәт ҡыҙы бына инде 29-сы тапҡыр ҙур тулҡынланыу менән беренсе класс уҡыусыларын ҡаршы аласаҡ. “Мәктәп, тыуған коллективым – мине һәр саҡ үҙенә саҡырып торған йылы усаҡ. Бында һәр ваҡыт яғымлы хеҙмәттәштәрем, үҙ балаларым кеүек яҡын уҡыусыларым менән осрашам, таяныс, терәк, хеҙмәтемдән кинәнес табам. Яратҡан һөнәремдән башҡа тормошомдо күҙ алдына килтермәйем”, - ти ул.

Изге ниәттәр, яңы уй-хыялдар менән уҡыу йылына аяҡ баҫҡан Гөлдәр Рәфҡәт ҡыҙына, мәктәп коллективына уңыштар юлдаш булһын.

**10. Татлыбаева, Ғәлиә. Өс быуын осрашты [Текст] : 12+ // Көнгәк. - 2016. - 6 декбрь. – Б.3.**



*Әсә һәм укытыусы ... Һәр беребеҙҙең дә ғүмерендә ике иң яҡын һәм ҡәҙерле кеше. Арыҫлан мәҙәниәт йортонда “Өс быуын осрашыуы” исемле ике байрам бергә үтте.*

1996 йылда мәктәпкә яҡташ-яҙыусы Динис Бүләков исеме бирелгәйне, унының 20 йыллыҡ юбилейы айҡанлы өс быуын уҡытыусылар, мәктәпте тамамлаған уҡыусылар саҡырылды. Байрамда хөрмәтле ҡунаҡтар ҙа бар ине: профсоюз комитеты рәйесе Рафаэль Бирҙеғолов, Мәләүез педагогия музейы директоры Вера Чараева һәм педагог-новатор, мәктәптең элекке кураторы-методисы Люциә Ғүмәрова. Ҡунаҡтар этнография һәм фольклор бүлмәһендә Тыуған илдең бай тарихы, мәктәптең күренекле яҡташтарының “Минең иң яҡшы”, “Мәктәп тарихы”, “Беҙҙең класс”, “Минең беренсе уҡытыусым”, “Мәктәп йылдары” күргәҙмәләре менән танышты. “Оҫта ҡулдар” түңәрәк етәксеһе, китапханасы Кинйәбикә Юлмөхәмәтованың Динис Бүләковтың картина-иллюстрациялы ижадына һәм йәш педагог, Мораҙым Шаһмановтың күргәҙмәләре бигерәк тә ҡунаҡтарға оҡшаны.

Был көндә сәхнәгә өс быуын уҡытыусылар, мәктәпте тамамлаған уҡыусылар, күп балала әсәләр, уларҙың балалары һәм ейәндәре, өләсәйҙәре күтәрелде. Мәктәптең иң бәләкәс беренсе класс балаларының, “Нөгөш ынйылары” фольклор коллективы, “Миләш” һәм “Хазина” вокал коллективының сығыштары бөтәһенең күңеленә хуш килде. Ошо мәктәпте тамамлаған уҡыусы, Хәрби-Диңгеҙ флоты ветераны Фәнил Яманаев үҙенең йырҙарын беренсе уҡытыусыһына, уҡытыусыларына, мәктәптең хәрби етәксеһенә бағышланы.

Байрамды ойоштороған Гөлсөм Хисаметдиноваға һәм бағымсы ярҙамы күрһәткән Самат Мәксүтовҡа рәхмәтлебеҙ.

**11. Әбдрәжәпова, Зөлхизә. Абруйлы уҡытыусы, үрнәкле әсә [Текст] : 12+ // Көнгәк. - 2015. - 23 июль. - Б. 3.**

*Әҙәм балаһы был донъяла ҡунаҡ ҡына. Өлөшөнә төшкән ғүмеркәйҙе ҡәҙерләп, үткән йылдар йомғағына күҙ ташлағанда башҡалар һоҡланырлыҡ баһа алырҙай йәшәүгә өлгәшкән күркәм шәхестәр арбыҙҙа байтаҡ. Шундайҙарҙың береһе – Мәләүез төбәгенең уңған, бай рухлы кешеләре көн иткән Смаҡ ауылынан Фатима Таштимерова.*

Ҡояш нурҙары ерҙе йомарт йылытҡан,бөтә тереклек унын сағыу нурҙарынан кинәнгән, яланда ер, ҡайын еләккәйҙәре өҙөлөп бешкән тәбиғәттең хозур мәлендә Аптраҡ ауылында донъяға килгән Фатима Абдулла ҡыҙының да күңеле йылы һәм яҡты. Ул үҙ яҙмышын бөйөк һәм абруйлы уҡытыусы һөнәренә бағышлаған – ошо өлкәлә 38 йыл тырышып эшләгән.

1970 йылда Салауат педагогия учелищеһын тамамлағас, Әбет башланғыс мәктәбендә уҡытыусы булып хеҙмәт юлын башлай. Ошонда ғүмерлек юлдашы, районда билдәле данлыҡлы Таштимеровтар нәҫеленән Валерий Ғимран улын осрата, йәштәр матур ғаилә ҡора, өс ҡыҙға яҡты донъя бүләк итә.

Фатима Таштимерова 1987 йылдан Динис Бүләков исеиендәге Арыҫлан урта мәктәбендә хеҙмәтен дауам итә. Кешегә эшенә ҡарап баһа бирәбеҙ. Нисәмә быуын йәштәргә ҡанат ҡуйып, белем биреп, оло тормош юлына сығарған ул.

"Һөнәремде бик яратып башҡарҙым. Уҡытыусы өсөн иң мөһиме – балаларҙы яратыу, уларҙың артабанғы яҙмышы өсөн яуаплылыҡты һәр ваҡыт иҫтә тотоу, үҙеңә төбәлгән эскерһеҙ күҙҙәрҙең ышанысын аҡлау", - тип һөйләй Фатима Абдулла ҡыҙы. Инде хаҡлы ялға сығыуына ла байтаҡ ғүмер үткән. Бергә эшләгән хеҙмәттәштәрен, яратҡан эшен һағынып иҫкә ала, уҡыусыларының яҡшы эштәре, уңыштары хаҡында ишетһә, ҡыуана, күңелен ҡырырҙай хәбәр килһә, доғалар уҡып , яҡшыға юрай, сабырлыҡ менән үткәрә. Башҡорт ҡатын-ҡыҙына хас нескә күңеле, тәүәккәллеге, ололарҙы хәстәрләү, кеселәрҙе ҡурсалау һәләте менән ауылдаштары, күрше-күләне ихтирамын яулаған. "Килен булып төшкән еремде тыуған ауылым кеүек үҙ иттем. Аллаға шөкөр, урамыбыҙ, ауылыбыҙ менән үҙ-ара аралашып, туғандарса йәшәйбеҙ", - тип ҡыуана.

Әсә булараҡ та бик бәхетле Фатима Абдулла ҡыҙы. "Ҡыҙҙарымдан, кейәүҙәремдән уңдым",- ти ул. Берәүгә лә яҙмыш гел цылмайып ҡына тормай, һөйөклө тормош иптәшен юғалтҡас, бөтә сабырлығын йыйып, артабан йәшәргә көс тапҡан ул. Ҡыҙҙарын уҡытып, һөнәр алырға ярҙам иткән, башлы – күҙле итеп, үҙ аллы тормошҡа өйрәткән, өгөт-нәсихәте,

аҡыллы кәңәштәре, үҙ үрнәге менән матур йәшәргә күндергән. Әсәһенә ҡарап. Ҡыҙын һөй, тип юҡҡа әйтелмәгән беҙҙең халыҡта. Өс ҡыҙы ла уҡытыусы булып, ошо исемгә тап төшөриәҫкә тырыша, йәш быуынды тәрбиәләүҙә лайыҡлы хеҙмәт күрһәтә. Ике ейәне һәм бер ейәнсәре бөгөнгө тормошона йәм һәм шатлыҡ өҫтәй.

Хаҡлы ялда булһа ла йәмғиәттәге үҙгәрештәргә битараф түгел. Мәктәптәр ябылыу, башҡорт теле дәрестәре кәмеү менән ризалаша алмай. Ауыл тормошоноң үҙәге булған белем усағын ябып ҡуйыу унда йәшәү уты, халыҡтың киләсәккә өмөтө һүнеүгә килтереүен аңлаған тәжрибәле педагог был хәл менән хис килешмәй.

Ғүмер артылыштарын үткәндә хәләленә һөйөклө тормош юлдашы була алған, тырыш хеҙмәт юлы итеп, үҙ һөнәренең абруйын күтәргән уҡытыусы, балаһын ҡурсаларға һәр саҡ әҙер оло йөрәкле әсә Фатима Абдулла ҡыҙына киләсәктә лә имен көндәр насип итһен.



***Фатима Абдулла ҡыҙы Таштимерова***

**12. Мусина, Рәмилә. Унғандар барҙа баҫыуҙар буш ятмаҫ [Текст] : 12+ // Башҡортостан. - 2018. - 1 июнь. - Б. 3.**

***Ауыл хужалыҡтарында яҙғы сәсеү эштәре тамамланыуға бара. Беҙ барғанда фермер Әхәт Зиннәт улы Ибраһимовтың хужалыҡ баҫыуында эштен ҡыҙған мәле ине: механизаторҙар ҡарабойҙай сәсеүгә тотонған.***

-Беҙ 400 гектар ерҙе эшкәртәбеҙ. Быйыл 80 гектарға – арпа, 120 гектар майҙанға иген культуралары ултырттыҡ. Әле иһә ҡарабойҙай баҫыуҙарын арттырҙыҡ: былтыр ул 120 гектар майҙанды биләһә, быйыл иһә 200 гектар

ергә сәсәбеҙ. Әле баҫыуҙа улдарым Ринат менән Фәнис, туғандарым Нияз Мәмбәтов, Айнур Әхмәтов эшләй, - ти Әхәт Зиннәт улы.



*Әхәт Ибраһимов баҫыуҙа ҡыҙыу эш ваҡытында*

Мәләүез районынын Смаҡ ауылында йәшәгән Ибраһимовтарҙың фермерлыҡ эшенә тотоноуҙарына биш йыл булһа ла, ғаилә башлығы Әхәт Зиннәт улы – тәжрибәле етәксе.

Бер йылдан 70 йәшен туйлаясаҡ Әхәт Ибраһимов йәш саҡта, армиянан ҡайтҡас, хеҙмәт юлын "Нөгөш" колхозы менән бәйләй. Колхоз рәйесе: "Күрҙем, халыҡ менән эшләй алаһың", - тип Бәләбәй ауыл хужалығы техникумына уҡырға йүнәлтмә бирә. Колхоз йыйылышында йәш егеттең уҡыған саҡта эш хаҡын һаҡлап ҡалыу тураһында ҡарар сығаралар. Шулай итеп, бала саҡтан техника ене ҡағылған Әхәт Зиннәт улы, агроном булыуҙан баш тартып, ауыл хужалығы идаралағына барып, йүнәлтмәне техник механикка уҡырға ала

-Бала саҡтан конструктор булырға хыялана инем. Техникумға барғас, ошо йүнәлештән китеүемде аңланым. VIII класта уҡ аэросана эшләнем. Ул саҡта хәҙерге кеүек иретеп йәбештереү аппараты юҡ ине. Төндә тимерлеккә барып, тимер бөгә инем. Һыҙма фәнен яраттым, малайҙарға ла ошо һәләт тапшырылған. Мотоуҙышыусы булырға ла хыялландым. Тик әсәйем, хәүефле тип, был ниәтемде кире ҡаҡты, - ти уҙаман.

1974 йылда уҡып ҡайтҡас, колхоз фатир бирә. Шунда уҡ уны техника оҫтаханаһы мөдире итеп ҡуялар. Колхоз рәйесе Миңләхмәт Мөхәмәт улы Йомағолов яҡшы кеше була. Ул диплом эшен контролдә тотоп, үҙе теманы

һайлап яҙҙырта. Аҙаҡ иһә ошо диплом эше буйынса колхоздың машина кәртәһен төҙөйҙәр. Алдынғы ҡарашлы хеҙмәткәрҙе бер аҙҙан "Ленинское знамя" колхозына баш инженер итеп тәғәйенләйҙәр. Әхәт Зиннәт улы "Агроснаб", МТС кеүек ҙур предприятиеларҙа эшләп,хаҡлы ялға сыға.

Фермерлыҡ эшенә лә уйламағанда тотона ул. Ер эше менән ике туғаны Салауат уны ярҙамға саҡыра. Әхәт Зиннәт улы туғаны етәкселегендә ике йыл эшләп ҡала. Салауат ауырып вафат булып ҡалғас, ул унын башланғысын дауам итә

Атаһынан күргән-уҡ юнған, тигәндәй, улдары ла Себергә вахта менән йөрөһә лә, ял ваҡыттарында баҫыуҙа эшләй. Улар көн дә иртә тандан Мәләүез ҡалаһынан килеп, ялан эше менән булыша. Егәрле егеттәрҙе тормош иптәштәре аңлап тора, ҡоҙа-ҡоҙағыйлары ла һәр саҡ ярҙамға килергә әҙер.

-Эш башлағанда бер техникам да булманы, тырмаһына тиклем һатып алдым. Әле "Дон" комбайны, сәсеү машинаһы, культиватор кеүек бөтә кәрәкле техниканы туплап киләбеҙ. Агрегаттарҙын күбеһен иҫке техниканан үҙебеҙ эшләнек. Мәлендә өлгөрөр өсөн көҙҙән үк баҫыуҙарҙын 50 процентын эшкәртергә кәрәк. Техниканы яйлап яныртыу бурысы тора. Әле иген таҙартҡыс эшләп ятам, - ти Әхәт Зиннәт улы.

Ғаилә башлығы улдарынын тырыш булыуына ҡыуанһа ла, һаулыҡтары бөтә бит, тип Себергә йөрөгәндәренә борсола. Әле Фәнис улы тыуған еренә ҡайтырға ниәтләнгәненә ҡыуана. "Үҙ ерендә лә аҡса эшләргә була. Хеҙмәт Һөйгән кеше ҡайҙа ла урынын таба", - тип иҫәпләй ул.

Сығышы менән районды Яҡтыкүл ауылы егете Әхәт Зиннәт улы Бишбүләк районынын Ҡунаҡкол ауылында тыуып үҫкән Розалия Мостафа ҡыҙын Бәләбәйҙә осрата. Дүрт йыл дуҫлашып йөрөгәндән һуң улар өйләнешә. Смаҡ ауылында төпләнгән тырыш йәш ғаилә тәүге көндәрҙән үк үҙен яҡшы яҡтан күрһәтеп, ауылда үҙ кеше булып китә. Розалия Мостафа ҡыҙы 1978 йылда ауылда балалар баҡсаһы аса һәм ун бер йыл уның мөдире булып эшләй. Ибраһимовтар өс баланы аяҡка баҫтырған. Хәҙер иһә ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләүгә лә үҙ өлөштәрен индерәләр.

Артабан ниндәй пландар менән йәшәйһегеҙ, тип ҡыҙыҡһынам хужалыҡ етәксеһенән. "Мал үрсетергә йәш тә арыу уҡ. Электән малсылыҡҡа күнелем ятманы. Техника менән эшләргә яртам. Әгәр ҙә көн талабы булып, мохтажлыҡ тыуһа, малға ла тотонорбоҙ", - ти Әхәт Зиннәт улы. Әйткәндәй,әлегә улар субсидия кеүек дәүләт ярҙамы алмағандар, әммә башҡаларҙан бер ҙә ҡалышмайынса фермерлыҡ эшен алып баралар.

Инде олпат йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, ошондай яуаплы ла, тынғыһыҙ ҙа Ибраһимовтар ғаиләһе кеүек уңғандар барҙа, әлбиттә, республика баҫыуҙары буш ятмаҫ.